*Нәгим ИШБУЛАТОВ,*
*филология фәндәре докторы*

# СИЛӘБЕ БАШҠОРТТАРЫ ҺӨЙЛӘШЕ

Силәбе башҡорттары һөйләштәренә уртаҡ һыҙаттар хас булыу менән бергә, айырмалыҡтар ҙа бар. Мин был мәҡәләмде баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәремә һәм 1962 йылғы экспедицияла ҡатнашыусы булараҡ йыйған материалдарға нигеҙләнеп яҙам. Хәҙерге ваҡытта халыҡ теленең байлығы һәм төп һыҙаттары үҙгәреүе һәм кәмеүе лә мөмкин. Оло быуын тел байлығын һәм рухи байлыҡты үҙе менән алып китә. Башҡа сәбәптәр ҙә быға булышлыҡ итә.

Силәбе башҡорттарының теле **Арғаяш, Салйот** һәм **Мейәс** һөйләштәренә бүленә. Был һөйләштәр төньяҡ-көнсығыш һөйләштәргә хас түбәндәге һыҙаттарҙы үҙҙәрендә һаҡлай:

1. Һүҙҙәрҙең ҡалын варианттарының ҡулланылыуы: *сас — сәс, сасыу — сәсеү, асы — әсе, кыйык — кейек (кырағай йәнлек).*
2. Тартынҡы өндәрҙең яңғыраулаlныуға, сиратлашыуға булған йүнәлешенең күберәк йәйелеүе:
   а) Арғаяш һөйләшендә ике һуҙынҡы араһында **ç** өнө **ҙ** өнөнә күсә: *аҙыл — аçыл, баҙыу — баçыу;*
   б) Салйот һөйләшендә **ҙ** һәм **ç** өндәре **һ** өнөнә күсә: *кыһыл — кыҙыл, быһау — быҙау.*
3. Ижек башында **й** өнө урынына **ж** булған һүҙҙәр: *жыйыу — йыйыу, жәй — йәй, жите — ете, аржак — арьяк, кинжә — кинйә.*
4. Ҡылымдың бойороҡ һөйкәлеше *-ың* ялғауы менән бирелә: *алың — алыгыҙ, йырҙап эйең — йырлап ебәрегеҙ.*
5. Ҡылымдың йөкмәтеү йүнәлеше ялғауҙары башҡа варианттар менән бирелә: *кейегеҙ — кейҙер, еткеҙ — еткер, туңыр — туңдыр.*
6. Ҡылымда һорау киçәксәһе зат ялғауынан алда килеүе мөмкин: *аламың — алаһыңмы, аламыгыҙ — алаһыгыҙмы.*
7. Ваҡыт һәм аралыҡ буйынса сикте белдергән үҙенсәлекле бәйләүестәр бар: *киска тәре — киска тиклем, күлгә тәксем — күлгә тиклем.*
8. Был һөйләштәргә хас ҡайһы бер һүҙҙәр:

инәй — әсәй
ҡарттай — олатай
ҡәртнәй — өләсәй
ҡыҙҙар — ҡайынһеңле, бикәс
апфын — килендәш
оро — ҡоҙоҡ
ылы — аптырау ымлығы
әбсәй — ҡурай еләге
ҡалаҡай — бәпәйҙе аяҡҡа баçтырыу һүҙе
аймаҡ — бәләкәй ырыу (ара)
алғаҙау — йөрәкһеү, тулҡынланыу
быуай — атайҙан оло кеше
аран — һарыҡ ояһы (ер ҡаҙып эшләнгән)
арсыу — әрсеү
асыуат — аҡтатыр үләне
атау — утрау (күл уртаһындағы)
солоҡ — бал ҡорто
бағана — бая
бағыныу — буйһоноу
бағыу — ҡарау
баҙыу — арыу
байғош — өкө
баҡырыу — ҡысҡырыу
балға — сүкеш
балдыҙ — ҡатының һеңлеһе һәм ҡустыһы

балсыҡ — тупраҡ
боҡай — баланы ҡурҡытыу һүҙе
беҙ — йөҙө (балтаның һ.б.)
биштәрләү — артмаҡлау
бормаҡай — бөҙрә сәс
бөтмәрсек — ҡыр кишере
иген турғайы — һабан турғайы
дунала — мәмешкәк
егем — екке (ат)
еле — ҡолондар торған урын
иген — баҫыу
игәт — бирнә
керсек — тубырсыҡ
кикел — аттың маңлай ялы
ҡолҡас — ҡолонсаҡ
ҡәмәрсек — аҡ турғай
ҡағылсан — сана кәйелгән урын
ҡаҡсан — йоҡа кәүҙәле кеше
ҡуйтыр — тире тун
ҡумалтай — ҡуңалтаҡ (ойоҡһоҙ кейеү)
ҡупа — һаҙлыҡ
мыҡты: мыҡты атаһы — атаһына оҡшаған
нурыштау — көн боҙолоу
олғашыу — ҡулынан тотоу
өйәмә — туп-тулы (өйәмә күнәк eлəк)
сағыр: сағыр күҙле ат — күҙенә аҡ төшкән
сасмау — сәсбау
сыр — селбәрә
тоҡон — бетәү (арпанан тоҡондай үрә бешерҙек)
толға — асаяҡ
төбөр — ағас төбө
төйөҫ — туҙ һауыт
төшәнеү — һаташыу
туҙғаҡ — бәпембә
урындыҡ — һике
халъя — талпан
һаба — үҙән
һайғаҡ — түшәм
һыртлыҡ — арҡалыҡ
һыу буғаһы — үгеҙ-баҡа
эремек — эремсек
юҫыҡ — йүнәлеш
ҡуржаҡ — йүшә (ағастағы ҡар)
таш еләге — ҡайын еләге
йорсо — ҡәйнеш
күгәл — һуна өйрәк
күң — күтер (йығылған ҡамыш ҡатламы)
ҡор — табын
ҡоролдай — ваҡ ҡош
әүмәлә, ылыш, боламса, ыҙмыҡ,
саламай — боламыҡ (ҡаймаҡ һәм ондан)
оҙан — ҡор
божор — ҡор (ҡош)
бағым — көн бите
дуйын — балсыҡ
алаша — һуғым аты

**Салйот һөйләше**

Салйот һөйләшендә ***ҫ, ҙ*** урынына ***һ*** килә. Салйот һөйләше Арғаяш һөйләшенең йоғонтоһона ныҡ бирелгән. Борон был һөйләш ҡәрҙәш булмаған ниндәйҙер телдең йоғонтоһон ныҡ кисергән булырға тейеш.

Арғаяш һөйләшендәге ***ҫ*** өнө Салйот һөйләшендә ***һ*** өнөнә күсә: *һеҫтең (һеҙҙең) — һеһтең* һ.б. Был күсеш Себерҙәге төрки телдәр менән дә бәйләнә.

Салйот һөйләшендә ижек, һүҙ аҙағында ла ***һ*** өнө килергә мөмкин: *кыһка — кыҫка, барабыһ — барабыҙ.*

Һүҙҙең беренсе ижегенә баҫым яһалып, икенсе ижегендә һуҙынҡы өн әйтелмәгән һүҙҙәр бар: *морн — морон, тынс — тыныс* һ.б.

Салйот башҡорттары йәшәгән ауылдар: Әмин, Түләк, Ҡаҙаҡбай, Ҡунаҡбай, Бүре, Сәркә, Мүре, Ҡыҙыл, Ҡолошбай, Ыҫҡайлы, Зәбир, Кәҫле, Хәлит, Таҡталым, Ҡарасур, Ҡарағайкүл һ.б.

Ҡайһы бер морфологик үҙенсәлектәре: ҡылымдың *-ың* ялғауы: *сыйғыс мын уйнамың — шырпы менән уйнама, алың — алығыҙ.*

Эшкә өндәүҙе белдерә торған ялғау: *-айығың/-әйегең*: *барайығың — барайык;* Ҡыҙыл һ.: *барайығыҙ*;

*-кылай (-кәләй)* — мөмкинлек сифат ҡылымының ялғауы: *эштәгеләй эш — эшләрлек эш*;

*-калы* маҡсат төшөнсәһен белдерә: *әйҙәң эштәгәле — әйҙәгеҙ эшләргә.* Был мәғәнәлә *-а/-ә/-й* һәм *-каны/-кәне* ялғауҙары ла ҡулланыла: *Ағас кырка китәйегең. Малды күп бакканы кушмайҙар ине.*

*Бағыу* ҡылымы *карау* ҡылымы урынында ҡулланыла: *кулынан килер эшенә бак. Тәнәй баға (бала карай).*

*Сары* бәйләүесе: *мыңа сары — быға тиклем; тәре: кискә тәре — кискә тиклем.*

*Ҡуй* кисәксәһе: *барған куй.*

Һөйләшкә хас һүҙҙәр: аҡыя — ҡыҙылтүш турғай, урҙан — өйрәк төрө, йоморосҡа — кәрешкә (үлән), ҡороһҡа — тышлы тун, төһөн — һимеҙ ат, сыл — икмәк башы, әжекәй — ҡыҙыл эремсек, йыбау — ялҡау, шәңкә — йүнһеҙ, бағым — көн бите, ишәнеү — һыуҙан сирҡаныу, лүперт — бысраҡ, артмыш — килмешәк, аш кәбәне — әсҡерт, бәһтек — төпөш кеше, ҡоһоҡ — йүшә, ҡунау — төләү, ләшә — батҡыл, ылый — аптырау, күндек — күтер, сатра — юл сатлығы.

### Арғаяш һөйләше

Был һөйләшкә нигеҙҙә Арғаяш һәм Ҡоншаҡ райондарында, шулай уҡ Курған өлкәһенең Сафакүл һәм Әлмән райондарында йәшәгән башҡорттарҙың теле ҡарай. Элек был төбәктәрҙә оло ҡатай, ялан ҡатай, һеңрән, һыҙғы, һарт, ҡалмыҡ, бәкәтин һ.б. ырыуҙар йәшәгән.

Уның сиге шундай фонетик үҙенсәлек буйынса билдәләнә: ижек аҙағындағы **ҙ** өнө һаңғырауланып **ç** өнөнә, ә ике һуҙынҡы араһындағы **ç** өнө яңғырауланып **ҙ** өнөнә күсә:

ҡаç — ҡаҙ, беç — беҙ, һеç — һеҙ, моç — боҙ; аҙыл — аçыл, баҙам — баçам, яçам — яҙам, иҙәр — иçәр.

Арғаяш һөйләшендәге **ç—ҙ** күсеше Себер төрки телдәрендәге **с—з** күсеше менән бәйле.

Арғаяш һөйләшендә **-ҙҙ** урынына **-çт, -ҙҙ** һәм **-ҙг** урынына **-çk, -çк** килә: *һеçтең — һеҙҙең, боçтар — боҙҙар, яçкы — яҙғы, теçкен — теҙген.*

***-айы-*** өн ҡушылмаһы ***-и-*** өнөнә әйләнеүе мөмкин: *атим — атайым, сирсык — сыйырсык.*

Һүҙҙәрҙең ҡалын варианттары осрай: *шайҙау — шәйләү, сасак — сәсәк, арсыу — әрсеү, укыл атай — үкел атай.*

Яңғыҙлыҡ исемдәргә һәм ҡәрҙәшлек терминдарына *-алар* формаһы ҡушылып, төркөм күплеге белдерелә: *Сәғиталар — Сәғиттәр, еңгәңаларға — еңгәңдәргә.*

Һөйләшкә хас рәүештәр: *тәйән — һәр вакыт, мыкты — бөтөнләй: мыкты алай түгел — бөтөнләй улай түгел, кисәү — һуң, бикәр — бөтөнләй, кискелә — кисен, яҙалата — яңылыш, күрәләтә — беләкүрә, тыма ярҙы — бөтөнләй ярлы;*

*-калы* ялғауы маҡсатты белдерә: *бесән сапкалы китте — бесән сабырға китте, балык бағалы киткән — балык тота киткән;*

*-маçты* ялғауы киләсәк замандың юҡлығын белдерә: *мин бармаçтым — мин бармаçмын.*

*Эйеү* ярҙамсы ҡылымы *ебәреү* ҡылымына тап килә: *йырҙап эйең — йырлап ебәрегеҙ.*

Ваҡыт һәм урын буйынса сик *тәре, тиксем, сәре* бәйләүестәре менән белдерелеүе мөмкин: *кискә тәре — кискә тиклем, ағаса тәре — уға тиклем, күлгә тәре — күлгә тиклем, өйгә сәре — өйгә тиклем.*

*Менән* бәйләүесе дүрт вариантта килә: *менән/мынан/мән/ман: һинең менән, балта ман.*

Һөйләшкә хас ҡайһы бер һүҙҙәр:

алғаҙау — дәрт итеү
аңҡау — һыуһау
асан — сибек
асытҡы — аҡ татыр урын
атайҙауыс — ҡыҙылтүш
атау — утрау
ахымдау — ваҡһыныу
баҙыҡ — оялсан
боған — өйрәк төрө (башы ҡара, муйыны ҡыҙыл)
бөгәр — терһәк быуыны
дегәнәк — гөлйемеш ағасы
дунала — энәлек
иген турғайы — һабан турғайы
ирте — кәртә сыбығы
ямуртай — туйға алып барған эсемлек
яраныу — бәйгегә ат әҙерләү
күнрә — биткә төшкән тут
ҡор — табын
ҡорҙашыу — табындаш булыу
ҡуҡый — һыу тауығы
сарҙаҡ — аҡсарлаҡ
таçҡалыҡ — һауыт-һаба шкафы

Шулай итеп, был һөйләш бик үҙенсәлекле.

## Мейәс һөйләше

60-сы йылдарҙа Мейәс һөйләше үҙенең байлығын һаҡлай ине әле.

Был һөйләштә Әй яғының да, Арғаяштың да үҙенсәлектәре бергә ҡушыла. Унда Ҡурған өлкәһенең Сафакүл районында йәшәгән башҡорттарҙың теле менән бәйләнеш тә һиҙелеп ҡала.

Мейәс һөйләшендә ***-kh, -кh*** өн ҡушылмалары ***-хх*** өнөнә күсә: *каххыу — какһыу, йөрәххец — йөрәкһец, туххан — тукһан.*

***-пh*** өн ҡушылмаһы ***-фф*** өнөнә күсә: *туффа — тупһа, аффын — апһын.*

Ҡайһы бер һүҙҙәрҙә ***с*** өнө урынына ***h*** өнө килә: *һаралйын* — көньяҡ-көнсығыш һөйләштәрҙә: *саралдын, һөйәл — сөйәл, һүмес — сүмес, һөлгө — сөлгө.*

Ижектәрҙең башында ***й*** урынына ***ж*** килгән һүҙҙәр бар: *жыйыу, жуйыу, аржак, жәйәц, жәйҙәц, кинжәкәй (кесе кайынһеңле), жирек — ерек, жил — ел;*

***-ң*** урынына ***-ңғ***: *куңғыр, куңғыҙ, аңғыра* — көн.-көнс.: *куңыр, куңыҙ, аңра.*

Метатеза күренеше: *кәлейец — кәйелец, айһауыҙ — аяуһыҙ, арбаҙ — аҙбар, акçак — аçкак;*

***-ғ, -м*** өндәре алдынан ***-л*** төшөп ҡалыу: *һа(л)ған, һа(л)маған.* Был күренеш бөтә төньяҡ-көнсығыш һөйләштәргә хас. Миҫалдарҙан күренеүенсә, ҡылымдарҙың аҙағында ***-л*** төшөп ҡала.

*Алып* ҡылымы үҙенән һуң килгән ярҙамсы ҡылымдар менән берегеп китә: *әпкил — алып кил, апкал — алып кал, апсык — алып сык.*

Бала-сағаның ата-инәһенә, шулай уҡ яҡын туғандарына оҡшашлығы ***-с*** ялғауы менән белдерелә: *атас — тас атаһы, инәс — тас әсәһе, карттас — тас олатаһы, картнәс — тас өләсәһе.*

Бындай ялғау көньяҡ диалекттың урта һөйләшендә лә бар: *атас, инәс.*

Һөйләштә иркәләү-кесерәйтеү ялғауҙары һүҙ яһаусы булып ҡулланылыусан: *бәрәкәй — бәрәс, сипекәй — себеш, кинжәкәй — кайынһеңле, кендекәй — кендек инәһе;*

*-лыкас* ялғауы сифат яһаусы булып килә: *тоҙҙокас — йыуаса, һөттөкәс — һөтлөкәй, беттекәс — һарык йыуаһы;*

*-ңғы* ялғауы һүҙынҡыға бөткән рәүештән сифат яһай: *баяңғы эш — баяғы эш, әлеңге нәмә — әлеге нәмә, элеккеңге хәлдәр — элекке, элгәреңге кәсеп — элекке кәсеп.*

Зат менән үҙгәргәндә билдәһеҙ үткән заман ялғауының аҙағындағы ***-н*** төшөп ҡала: *кайткам — кайтканмын, кайткаң — кайтканһың.*

Шарт һөйкәлешенең ҡатмарлы *-дынинһә* ялғауы менән белдерелеүе мөмкин: *алдынинһә — алһа, барҙынинһә — барһа;*

***-ш*** ялғауы ҡайтым йүнәлешен дә сағылдыра: *йыуыша — йыуына;* билдәне лә белдерә: *сәйнәшә туған эт — тешләй торған эт, тибешә туған ат — тибә торған ат.*

*Алыу* ярҙамсы ҡылымы алдынан ***-й*** өҫтәлергә мөмкин: *күрәйамаған — күрә алмаған, киләйамаған — килә алмаған.*

Мейәс һөйләшенә хас ҡайһы бер һүҙҙәр:

балдыҙ — ҡәйнеш
быуай — атайҙың ағаһы
тәгәс — сынаяҡ
әбсәй — ҡурай еләге
дыуыш — шәре
тупый — бүрек
бетәү — һарыҡ аҙбары
һырғауыл — баҡан
аш — иген
мауыҙ — мәскәй
аяҙ — аҡлан
бирҡалыу — бүгеү
боғаҡ — бүрләтәү
дуғай — йылға бөгөлө
ҡалмәргән — һыу ҡарсығаһы
сөңкә — сынаяҡ өҫтө
жәйкә — сынаяҡ аҫты

Арғаяш, Салйот һәм Мейәс һөйләштәре тәбиғи рәүештә башҡорт диалект-һөйләштәренә тоташа.